Башҡортостан Республикаһы Учалы районы муниципаль районының муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы Ә.Ғ. Хөснөтдинов исемндәге Учалы ауылы урта дөйөм белем биреү мәктәбе

| | | |
|---|---|---|
| Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының методик берекмә ултырышында ҡаралды.Протокол № 1 “29”август 2023 йыл Етәксеһе: Нотфуллина Р.В. _________ | Килешелде: Уҡытыу –тәрбиә эше буйынса директор урынбаҫары: Ғилмитдинов А.Р. ____________ | Раҫлайым: Мәктәп директоры: Кирәева Г.Ә. _____ Бойороҡ № 1 23авг.2023йыл |

5-9-сы кластар өсөн “ТУҒАН (БАШҠОРТ) ӘҘӘБИӘТЕ” УҠЫУ ПРЕДМЕТЫ БУЙЫНСА

2023-2024 уҡыу йылына эш программаһы

Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-11 кластары өсөн “ Туған (башҡорт) тел һәм әҙәбиәт предметы буйынса белем биреү өлгө программалары ”китабына нигеҙләнеп төҙөлдө авт. В.И. Хажин, Ә.Х.Вилданов , Ф.Ә.Аҡкужина.-Өфө : Китап,2017.

Төҙөнө: юғары категориялы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Нотфуллина Р.В.

# ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Аңлатма яҙыу

“Туған (башҡорт) әҙәбиәте” уҡыу предметына дөйөм характеристика

“Туған (башҡорт) әҙәбиәте” уҡыу предметын өйрәнеүҙең маҡсаты һәм бурыстары

“Туған (башҡорт) әҙәбиәте” уҡыу предметы программаһының төп йөкмәмәткеһе

“Туған (башҡорт) әҙәбиәте” уҡыу предметының урыны

“Туған (башҡорт) әҙәбиәте” уҡыу предметының йөкмәткеһе

5-се класс

6-сы класс

7-се класс

8-се класс

9-сы класс

“Туған (башҡорт) әҙәбиәте” предметын төп белем биреү кимәлендә үҙләштереүҙән көтөлгән һөҙөмтәләр

Шәхси һөҙөмтәләр

Метапредмет һөҙөмтәләр

Предмет һөҙөмтәләре

5-се класс

6-сы класс

7-се класс

8-се класс

9-сы класс

Тематик планлаштырыу

5-се класс (34 сәғәт)

6-сы класс (34 сәғәт)

7-се класс (34 сәғәт)

8-се класс (34 сәғәт)

9-сы класс (34 сәғәт)

Ҡулланылған сығанаҡтар

## АҢЛАТМАЛЫ ЯҘЫУ

Төп дөйөм белем биреүҙең 5-9-сы класстар өсөн «Туған (башҡорт) әҙәбиәте» предметының яҡынса эш программаһы түбәндәге норматив-хоҡуҡи документтар нигеҙендә төҙөлдө:

1) Рәсәй Федерацияһы Конституцияһы;

2) 2012 йылдың 29 декабрендәҡабулителгән 273-ФЗ номерлы «Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында» Федераль закон (төҙәтмәләр һәм өҫтәмәләр менән);

3) Рәсәй Федерацияһының 1991 йылдың 25 октябрендәҡабулителгән «Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» 1807-1-се закон(төҙәтмәләр һәм өҫтәмәләр менән);

4) Төп дөйөм белем биреүҙең федераль дәүләт белем биреү стандарты (2021 йылдың 31 майында РФ Мәғариф министрлығының 287-се бойороғо менән раҫланған);

5) Төп дөйөм белем биреүҙең өлгөлө база белем биреү программаһы (Дөйөм белем биреүҙең Федераль мәғариф-методик ассоциацияһы ҡарары менән раҫланған, 2022 йылдың 18 мартындағы 1/22-се протокол);

6) Өлгөлө белем биреү программаһы (Дөйөм белем биреүҙең Федераль мәғариф-методик ассоциацияһы ҡарары менән 2020 йылдың 2 июнендә раҫланған (протокол № 2/20).

Программа туған башҡорт телен белгән һәм һөйләшкән уҡыусылар өсөн тәғәйенләнгән.

Программа федераль дәүләт белем биреү стандарты методикаһы буйынса система-эшмәкәрлек алымына нигеҙләнгән.

## «Туған (башҡорт) әҙәбиәте» программаһына дөйөм характеристика

«Туған (башҡорт) әҙәбиәте» предметы гуманитар белем биреүҙең структур өлөшө булараҡ ҡарала, шуға күрә курстың йөкмәткеһе башҡорт әҙәбиәтен дә, башҡорт халҡының тарихын һәм мәҙәниәтен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, традицияларын өйрәнеүҙе лә күҙ уңында тота.

Туған (башҡорт) әҙәбиәтенән программа календарь план нигеҙендә төҙөдө (йыл, ваҡыт, даталар). Программаға башҡорт халыҡ ижады өлгөләре, башҡорт әҙәбиәте менән бер рәттән татар, ҡаҙаҡ һәм рус әҙәбиәте әҫәрҙәре лә индерелде.

Предметты дөйөм белем биреү системаһына индереү башҡа гуманитар дисциплиналар менән дә («Туған (башҡорт) теле», «Тарих» һәм башҡа дисциплиналар) йөкмәткеле бәйләнештәр ярҙамында тәьмин ителә.

Программа әҙәбиәтте һәм мәҙәниәтте бергә өйрәнеүҙе күҙ уңында тота, уларҙы башҡорт халҡының үҙенсәлекле менталитетын тәьмин итеүсе ҡабатлаусы рухи мираҫ итеп ҡарай. Программа тыуған әҙәбиәттең белем биреү мөмкинлектәрен тормошҡа ашырыуға, туған әҙәбиәткә, мәҙәниәткә ихтирам уятыуға, туған халыҡтың тарихы менән таныштырыуға йүнәлтелгән.

Уҡыу өсөн текстар башҡорт ауыҙ-тел ижадының сағыу өлгөләре (әкиәттәр, эпостар, ҡобайырҙар, халыҡ йырҙары, легендалар, мәҡәлдәр, йомаҡтар), башҡорт фантастикаһы, башҡорт халҡының тарихына, мәҙәниәтенә, йәшәйешенә, төбәк тәбиғәтенең үҙенсәлектәренә ҡағылышлы әҙәби һәм публицистик текстар һайлап алынды. Авторҙарҙың биографиялары менән таныштырыу ҙа күҙ уңында тотола.

Әҙәби текстарҙы һайлағанда, иң тәүҙә уларҙың гуманистик йөкмәткеһен, художество ҡиммәтен, уҡыусының шәхесенә ыңғай йоғонто яһау мөмкинлеген иҫәпкә алынды. Программаның нигеҙен башҡорт әҙәбиәтенең киң билдәле

әҫәрҙәре тәшкил итә. Милли менталитетты сағылдырған, халыҡ тарихын һәм мәҙәниәтен һүрәтләгән әҫәрҙәр программала мөһим урын биләй.

Рус телендә белем алыусы башҡорт балалары башҡорт әҙәбиәтен тематик, тарихи-хронологик принцип нигеҙендә өйрәнә. Был процесс туған телде өйрәнеү менән тығыҙ бәйләнештә башҡарыла. Предметты өйрәнеү барышында уҡылған текстарҙағы лингвистик күренештәрҙе (ижади. яҙма эштәр, тексты һәм картинаны сағыштырыу, музыкаль әҫәр, проект эштәре һ.б.) табыу, аңлатыу буйынса эштәр башҡарыу күҙ уңында тотола.

Программала гуманитар циклдың башҡа дисциплиналары менән предмет-ара бәйләнештәр, маҡсатлы һәм йөкмәтке осраҡлылығын, шулай уҡ билдәле бер күренештәрҙе өйрәнеү барышында аутентик материалды ҡулланыуҙың ойоштороу формалары иҫәпкә алына.

Башҡорт әҙәбиәтен өйрәнеүҙе кластан тыш сараларҙа ла тормошҡа ашырырға мөмкин (тасуири уҡыу конкурстары, яҙыусылар менән осрашыуҙар, тыуған яҡты өйрәнеү музейҙарына сәйәхәттәр һ.б.).

## «Туған (башҡорт) әҙәбиәте» уҡытыуҙың төп маҡсат һәм бурыстары

«Туған (башҡорт) әҙәбиәте»нән белем биреүҙең маҡсаты - башҡорт әҙәбиәтенең (мәҙәниәтенең) рухи-әхлаҡи ҡиммәттәре, Рәсәй халыҡтарының башҡа милли әҙәбиәттәрее (мәҙәниәттәре) ҡиммәттәре менән танышыу аша шәхесте тәрбиәләү һәм үҫтереү; уҡыусыларҙың эстетик зауығын, ижади һәләттәрен үҫтереү, уларҙың дөйөм уҡыу мәҙәниәте һәм нәфис әҙәбиәт үҙенсәлектәре тураһындағы фекерҙәрен формалаштырыу.

«Туған (башҡорт) әҙәбиәте» предметын уҡытыуҙың бурыстары:

– Башҡортостандың берҙәм тарихи-мәҙәни мөмкинлеге шарттарында башҡорт халҡының әҙәби мираҫы менән таныштырыу, республиканың бөтә халыҡтары мәҙәниәттәре менән диалог булдырыу;

– тарихи, мәҙәни, әхлаҡи, эстетик ҡиммәттәрҙе быуындан быуынға тапшырыуҙа тыҡыуған башҡорт әҙәбиәтенең ролен аңлатыуу;

– башҡорт әҙәбиәтенең һәм милли тарихтың үҙ-ара бәйләнешен асыҡлау, башҡорт халҡының матди һәм рухи мәҙәниәтен туған әҙәбиәттә сағылдырыуҙың конкрет милли формаларының төрлөлөгө тураһындағы фекерҙәр формалашыуы;

– Башҡортостан  һәм Рәсәй Федерацияһының башҡа халыҡтары әҙәбиәттәренең, үҙ-ара йоғонтоһо, төрлө әҙәби бәйләнештәр тура һында белем алыу;

– башҡорт әҙәбиәтенә һалынған мәҙәни-әхлаҡи белемдәрҙе үҙләштереү; уҡылғандар тураһында фекерйөрөтә һәм баһалай белеү, улар  буйынса яҙма текстар төҙөргә өйрәнеү;

– көндәлек тормошта һәм белем алыу процесында башҡорт әҙәбиәте әҫәрҙәре менән аралашыу тәжрибәһен формалаштырыу;

– башҡорт әҙәбиәте әҫәрҙәрен уҡыуҙың өҫтөнлөгөн билдәләү һәм уҡыу буйынса үҙ аллы планлаштырыу тәжрибәһен туплау;

– донъяны танып белеүҙе, кеше менән йәмғиәт араһындағы мөнәсәбәттәрҙе аңлау, күп яҡлы диалог сараһы булараҡ башҡорт әҙәбиәте әҫәрҙәрен системалы рәүештәуҡыутәжрибәһен формалаштырыу;

– төрлө мәғлүмәт сығанаҡтары менән эшләү оҫталығын үҫтереү, интернеттан эҙләү, унаналынған материалдарҙы анализларға өйрәтеү;

– әҫәрҙәрҙәкүтәрелгән проблемаларҙы һәм уларҙың художестволы хәл ителешен, авторҙың позицияһына аңлатма биреү һәм сәнғәт әҫәрҙәрен, уларҙың фрагменттарын, образдарын һәм проблемаларын үҙ-ара, шулай уҡ башҡа сәнғәт әҫәрҙәре менән сағыштырыу нигеҙендә улар буйынса үҙ ҡарашын формалаштырыу;

## «Туған (башҡорт) әҙәбиәте» программаһының төп йөкмәткеһе

«Туған (башҡорт) әҙәбиәте» курсының йөкмәткеһе түбәндәге принциптар менән билдәләнә.

1. «Туған (башҡорт) әҙәбиәте» программаһының нигеҙен башҡорт әҙәбиәтенең һәм мәҙәниәтенең милли үҙенсәлектәрен кәүҙәләндергән башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәре тәшкил итә.

2. «Тыуған (башҡорт) әҙәбиәте» уҡыу программаһына хәҙерге заман авторҙарының башҡорт әҙәбиәтенең һәм мәҙәниәтенең милли традицияларын дауам иттереүсе, хәҙерге заман уҡыусыһына яҡынырaҡ һәм аңлайышлыраҡ булған әҫәрҙәреиндерелде.

Проблемалы-тематик бүлектәрүҙ-ара тығыҙ бәйләнештә. Бүлектәрэсендә башҡорт әҙәбиәте үҫеше хронологияһы һаҡлана. Һәр бүлектә башҡорт халыҡ традицияларының милли һәм мәҙәни үҙенсәлектәренә ҡағылышлы әҫәрҙәре менән бергәбашҡортмилли байрамдары: һабантуй, кәкүк сәйе һәм милли рух көсө, игелек, шәфҡәтлелек кеүек төшөнсәләрҙе сағылдырған әҫәрҙәр индерелде.

Әҙәби әҫәрҙәр менән берлектә һынлы сәнғәт, музыка, кино, театр әҫәрҙәре лә  милли үҙенсәлекле күренештәрәрҙе, бәйләнештәрҙе күҙәтергә мөмкинлек бирә (башҡорт мәҙәниәтендә сәнғәт диалогы). Ошо дөйөм принциптарға ярашлы 5-9-се кластар өсөн программа егерме һигеҙ проблема-тематик бүлектәргә бүленә:

**5-се клас**

- «Көҙ»;
- «Ҡыш»;
- «Яҙ»;
- «Йәй»;

**6-сы  класс**

- «Уҡыу — белем шишмәһе»;
- «Уҙған ғүмер-ҡалған хәтер»;
- «Төньяҡ амурҙары»;
- «Уралып ятҡанУралтау»;
- «Башҡорт халыҡ ғөрөф-ғәҙәттәре»;
- «Башҡорттар киттеһуғышҡа»;
- «Башҡортостандың халыҡ шағирҙары һәм яҙыусылары»;

**7-се клас**

- «Боронғонан  аманат»;
- «Дуҫлыҡта һәм берҙәмлектә көс»;

- «Ап-аҡ ҡарҙар яуа»;
- «Ғәзиздәрҙән ғәзиз әсәйҙәр!»;
- «Их, күңелле яҙ килә!»;

**8-се клас**

- «Мәктәп — белем шишмәһе!»;
- «Көҙ - хеҙмәтһәм муллыҡ миҙгеле»;
- «Уҡытыусы – ниндәй гүзәлисем»;
- «Салауат батыр ир ине»;
- «Ҡыш»;
- «Данлы һәм шанлы йылдар»;
- «Шаулап гөрләп яҙ килә»;
- «Тыуған ерем — минең Уралым»;

**9 – сы класс**

- «Тере шишмәләр»;
- «Кендегемде киҫкән ер»;
- «Данлы тарих»;
- «Батыр һәмтоғро ат»;
- «Еңеү көнө».

Һәр бүлектә темаһына һәм проблемаһына ярашлы әҫәрҙәр тупланды, шулай уҡ Рәсәй халыҡтары әҙәбиәтенән өлгөләриндерелде.

Программадонъя нәфис әҙәбиәтен үҫтереүгә ҙур өлөш индергән һәм туған һәм рус телендә яҙған билдәле милли яҙыусыларҙың әҫәрҙәрен үҙ эсенә ала. 5-се һәм 6-сы кластарҙа башҡорт халыҡ ижадын өйрәнгәндә милли фольклорға: мәҡәлдәргә, әйтемдәргә, экиәттәргә мөрәжәғәт ителә. Һәр милләттең тыуған ере тураһында әҫәрҙәре бар. Уҡытыусыбалаларҙаүҙтөйәгенә, халҡына, унынтарихына,мәҙәниәтенә, ғөрөф- ғәҙәттәренә һөйөү тәрбиәләү маҡсатында күп милләтле илебеҙҙеңтөрлө төбәктәрендә йәшәп ижадиткән үҙенең эшпрограммаһына индерә ала.

## «Туған (башҡорт) әҙәбиәте» программаһының урыны

Төп дөйөм белем биреүҙең федераль дәүләт белем биреү стандартына ярашлы, «Туған тел»; һәм «Туған әҙәбиәт» предметы индерелә һәм уҡыу өсөн мотлаҡ булып тора.

«Туған (башҡорт) әҙәбиәте» өйрәнеү өсөн 170 сәғәтбүленә — һәр класта 34 сәғәт (аҙнаһына 1 уҡыу сәғәте):

– 5 - се класта - 34 сәғәт (аҙнаһына 1 сәғәт, 34 уҡыу аҙнаһы);

– 6 – сы класта -34 сәғәт (аҙнаһына 1 сәғәт, 34 уҡыу аҙнаһы);

– 7- се класта -34 сәғәт (аҙнаһына 1 сәғәт, 34 уҡыу аҙнаһы);

– 8 - секласта -34 сәғәт (аҙнаһына 1 сәғәт, 34 уҡыу аҙнаһы);

– 9 – сы класта - 34 сәғәт (аҙнаһына 1 сәғәт, 34 уҡыу аҙнаһы).

Уҡыу йорто уҡыу планының өлөшөтәре иҫәбенә уҡыу предметын өйрәнеү өсөн бүленгән сәғәттәр һанын үҙ аллы арттырырға хоҡуҡлы.

## «ТУҒАН (БАШҠОРТ) ӘҘӘБИӘТЕ» УҠЫУ ПРЕДМЕТЫНЫҢ ЙӨКМӘТКЕҺЕ

### 5-се клас

**1-се бүлек. Көҙ**

Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр. Башҡорт халыҡ әкиәттәре «Әминбәк», «Аҡъял батыр».

*Әҙәбиәт теорияһы:* халыҡ ижады төрҙәре, ауыҙ-тел ижады.Әкиәт жанры тураһында төшөнсә.

Тыуған ил,тыуған төйәккә иңлектәр. арналған әҫәрҙәр. Т. Ғәниева. «Уралиә тигән ил». С. Муллабаев «Шатлыҡлы иртә». Б. Бикбай. «Туған тел». А.Йәғафәрова «Яҡшылыҡ». Н. Әминева «Тыуған ер». «Башҡортостан тауҙары» (белешмә). «Тыуған ер» (ҡобайр). Ф. Рәхимғолова "Мин – Башҡортостандан!". Ә.Вахитов«Аҡһаҡал васыяты». Р. Ниғмәти. « Йәмле Ағиҙел буйҙары». Ғарипов Р. «Торналар». Б. Ноғоманов. «Йәйбикәменән Көҙбикә» («Йылбабайҙыңдүрт ҡыҙы» әкиәтенән өҙөк). Иҫәнғолов. Ф. «Йылмайыу». Ғ. Хисамов. «Аҡъяурын сал бөркөт».

*Әҙәбәбиәт теорияһы:* Сағыштырыу, синоним, антоним,омоним тураһында төшөнсә.

**2-се бүлек. Ҡыш**

Башҡорт ауыҙ-тел ижадында (мәҡәлдәр, әйтемдәр, йомаҡтар). Башҡорт халыҡ йырҙары. Түбәнге кластарҙа алынған белемдәрҙе ҡабатлау һәм тәрәнәйтеү.

*Әҙәбәбиәт теорияһы:*Мәҡәлдәр, әйтемдәр, йомаҡтарға төшөнсә

Ҡышҡы тәбиғәт тураһындағы әҫәрҙәр. Әлибаев С. «Ҡыш». Н. Мусин. «Ҡоралайҙар». Әхмәҙиев В. «Ҡышҡы урманда».

*Әҙәбиәт теорияһы: Хикәйә тураһында төшөнсә*

Башҡорт халыҡ әкиәттәре. «Ҡамыр батыр», «Ҡәмән менән Сәмән, картуфсәскән Сәлмән».

**3-сө бүлек. Яҙ**

Яҙ һәм яҙғы эштәр (башланғыс кластарҙа алынған белемде ҡабатлау һәм тәрәнәйтеү) тураһында әҫәрҙәр. Р. Назаров "Яҙ килә". Хисмәтуллин З. «Сыйырсыҡ». С. Әлибаев «Яҙҙы кем алып килгән?» М. Кәрим. «Һеңлемден төшө». К. Даян. «Торналар».

*Әҙәбиәт теорияһы.* Йәнләндереү. Фразиологик берәмектәр.

Башҡортостан ҡоштары. Б. Ноғоманов. «Ҡарһылыу менән Яҙһылыу».

Еҥеүселәр. А. Игнбаев «Еңеү көнө». К. Мәргән. «Ҡурайсының үлеме». Р. Ниғмәти. «Еңеүселәргә дан!»

Мәҫәлдәр. М. Ғафури. « Һарыҡты кем ашаған?» Л. Толстой. «Ике иптәш».

*Әҙәби теория:* Мәҫәл һәм аллегория тураһында төшөнсә.

**4-се бүлек. Йәй**

Йәйге көндәр көтә. З. Муллабаев. «Йомарт йәй». З. Хисмәтуллин «Урман ҡунағы». С. Агиш. «Турыҡай».

## 6-сы класс

**1-се бүлек. Уҡыу — белем шишмәһе**

Ә. Әхмәт-Хужа«Алмаш үҫә». У.Кинйәбулатов. Уҡытыусыма. Дәүләтбирдина Т. «Миҙгелдәр».

**2-се бүлек. Уҙған ғүмер – ҡалған хәтер**

Минең йырым — Башҡортостан! З. Биишева «Башҡортостан». Р. Ғарипов "Дан һиңә, дан, Башҡортостан!" Ф. Туғызбаева. «Эй яҙмышым минең – Башҡортостан!». С. Бабич. «Башҡортостан». Ғ.Хөсәйенов «Мөҡәддәс».

Тыуған ер тарихы. Н.Нәжми "Һинең ниндәй улыңмын мин?" Ә. Усманов. «Башҡорттарҙың хәрби хеҙмәте». Ғ. Хөсәйенов «РудасыИсмәғил Тасим улы». Т. Ҡарамышева «Малайҙар». Л. Толстой. "Кешегә күпме ер кәрәк". Ә. Хәкимов «Еҙеүкәй янында» ("Һауыр ҡумта" романы буйынса).

Әҙәбиәттә азатлыҡ хәрәкәте темаһы. Башҡорт ихтилалдары.

Салауат Юлаев. Башҡорт әҙәбиәтендә башҡорт ихтилалдары темаһы. М. Иҙелбаев «Хушлашыу». Р. Бикбаев «Салауат ҡылысы». С. Злобин. «Салауат Юлаев». Ғ. Ибраһимов. «Сапҡын».

**3-сө бүлек. Төньяҡ амурҙары**

Башҡорт әҙәбиәтендә 1812 йылғы Ватан һуғышы темаһы. Рус-француз һуғышы тураһында бәйеттәр. Я. Хамматов «Төньяҡ амурҙары». Ҡаһымтурә (1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт полктары башлығы тураһында легенда).

*Әҙәбиәт теорияһы:*Бәйеттәртураһында төшөнсә

**4-се бүлек. Уралып ятҡан Уралтау**

Буракаев Д. «Урал тауҙары» (мәғлүмәт). Башҡорт халыҡ йыры «Урал».
Бикбаев Р. Уралыма. Я. Хамматов. «Самородок».

**5-се бүлек. Башҡорт йолалары**

Тәбиғәт менән берҙәмлектә. А. Ҡобағошов. «Ҡарға бутҡаһы тәмлеме?»
Ҡарамышева Т. Т. «Кәкүк сәйе». С. Агиш. «Ҡунаҡ һәм намыҫ».
Ф. Туғыҙбаева. «Һыу юлы».

**6-сы бүлек. Башҡорттар китте һуғышҡа**

Башҡорт халҡы геройҙары. Я. Хамматов. «Башҡорттар китте һуғышҡа»
Ҡ. Даян. «Шайморатов генерал».
Ә. Бикчәнтаев «Бөркөт һауала үлә».
Р. Насыров «Ил балаһы -Шәкирйән».

Башҡорт халыҡ ижады.
Башҡорт ауыҙ-тел ижады. Әкиәттәр «Урал батыр», «Алдар менәншайтан».
Көләмәстәр (анекдоттар).
Әҙәби мираҫ. Ҡол-Ғәли. « Йософ ҡиссаһы».
«Ҡармасан менән Сәрмәсән».

Үткән һәм хәҙерге
С. Юлаев. «Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға ҡуш булып», «Ҡарабай менән Сарыбай».
М. Акмулла. «Нәсихәттәр» .
Сәсәндәр ижады. «Һабрау», «Ҡобағош сәсән», «Байыҡ сәсән».
*Әҙәбиәт теорияһы.* Архаизмдар, неологизмдар, варваризмдар тураһында төшөнсә.

**7-се бүлек. Башҡортостандың халыҡ шағирҙары һәм яҙыусылары**

Башҡортостандың халыҡ шағирҙары. М. Ғафури *(биографик мәғлүмәт*). "Бир ҡулыңды!"
М. Кәрим *(биографик мәғлүмәт).* "Өсөнсө көн тоташ ҡар яуа".
Р. Ғарипов *(биографик мәғлүмәт).* «Аманат» *(ҡобайрҙан өҙөк).* Р. Бикбаев *(биографик мәғлүмәт).* «Халҡыма хат».
Башҡортостандың халыҡ яҙыусылары
З. Биишева *(биографик мәғлүмәт*. «Сынаяаҡ уйнатыу» ("Кәмһетелгәндәр" романынан өҙөк).
Ә. Хәкимов *(биографик мәғлүмәт).* «Сәләх ҡарт» *("Туй" хикәйәһенән)*

## 7-се класс

### 1-се бүлек. Боронғонан аманат

Халыҡ әкиәттәре. Башҡорт ауыҙ-тел ижады. Хайуандар тураһында әкиәттәр. «Етем төлкө». Тылсымлы әкиәттәр. «Алтын алма». Батырҙар тураһында әкиәттәр. «Алып Батыр». Көнкүреш әкиәттәре. «Алтын тамсы», «Һаранбай менән Зиннәт ағай».

*Әҙәбиәт теорияһы:* Аллегория, гипербола һәм литотғатураһынды төшөнсә.

Халыҡ хикәйәләре. Боронғо ырым-ышаныуҙарға нигеҙендә тыуған хикәйәләр «Етегән йондоҙ». «Ай менән Зөһрә». «Сыңрау торна».
Башҡорттарҙың килеп сығышы тураһында хикәйәттәр. Үҫәргән. (Үҫәргән ырыуы башҡорттарының килеп сығышы тураһында легенда). «Ырғыҙ», «Йөрәктау.
Топонимик хикәйәләр. «Ямаш һәм Йомаш ауылдары», «Мәмбәт ауылы тарихы». Ауылдар тарихы.
Тарихи хикәйәләр. «Биксура», «Бошман-Ҡыпсаҡ батыр».
Тормош-көнкүреш хикәйәләре. «Ғилмияза», «Зөлхизә».
*Әҙәбиәт теорияһы:* Легенда һәм риүәйәттәргә төшөнсә..

**2-себүлек. Дуҫлыкта һәм берҙәмлектә — көс!**

Тарихи йырҙар.Тыуған ил һәм халыҡтар дуҫлығы тураһында йырҙар. «Урал» (вариант), «Йәйләүек».
1773—1775 йылдарҙағы Пугачев ихтилалы тураһында йырҙар. «Салауат» (вариант). «Оло юл» (вариант).
1812 йылдағы Ватан һуғышы тураһында йырҙар. «Эскадрон», «Любизар».
Кантондар тураһында йырҙар. «Ҡолой кантоны», «Абдулла Ахун».
Ҡасҡындар тураһында йырҙар. «Буранбай», «Бейеш».
Көнкүреш йырҙары. «Зөлхизә», «Ғилмияза».
Таҡмаҡтар. «Ҡармасан һәмСәрмәсән» («Һуңғы Һартай» әҫәре буйынса).
Ноғман Мусин “Тайғаҡ баҫма”, Р. Байбулатов “Һарыбай”
Гүзәл илем!Бикҡолов Ш. «Урман...».
М. Ғафури. «Гөлдәрбаҡсаһында». Ж. Кейекбаев (биографик белешмә). «Оморҙаҡ олатай», «Туғандар һәм таныштар» (романдан өҙөк).
Балалар уйыны. «Сокор туп» (белешмә).

Башҡорт милли кейеме. (белешмә).
Игебаев А. "Онотманым һине ауылым!" М. Кәрим. «Ҡайын япрағы тураһында»

**3-сөбүлек.Ап-аҡ ҡарҙаряуа!**

К. Кинйәбулатова. «Һаумы, аҡ ҡыш!».С. Алибай. "Матур көн".
Ғ. Туҡай. «Ер йоҡоһо». Ә. Әһлиуллин. «Биҙәкле сана»
Ватанды һаҡлаусылар. Р. Шәкур. «Һаҡта тора илдең улдары». Ф. Аҡбулатова (биографик белешмә). «Атай икмәге».
В. Исхаков. «Кеше күңеле — тәрән дарья».
А. Баһуманов (биографик мәғлүмәт). «Юламан» «Ҡайҙа һин, генерал?» әҫәре буйынса))

**4-се бүлек. Ғәзиздәрҙән, ғәзиз әсәләр!**

Ғ. Зәйнәшева " Йырлайым әсәйем тураһында ".
З. Алтынбаева «Әсә һүҙе».
Ф. Исянғолов. (Биографик белешмә) «Бер йомғаҡ май ».
Ә. Бикчәнтәев «Яраланған бүре күҙҙәре».
Г. Яҡупова (биографик мәғлүмәт). «Мейес әбей».
Н. Игеҙйәнова «Өйрөлмәк»

**5-се бүлек. Их, күңелле яҙ килә!**

Р. Ниғмати. «Яҙ килде, яҙ!». М. Йәлил. «Йырҙарым» М. Ғафури .«Болон»

Х. Назар. «Йәйге йәшен».

Тыуған ерҙең ауазы.Һ.Дәүләтшина (биографик мәғлүмәт). «Айбикә».

Ю. Ухсай. «Болоттар». К. Аралбай. «Башҡорт теле».

М. Кәрим. «Әҫкәт Искәндәре» ("Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" повесынан өҙөк).С. Әлибай. «Ямғыр теләү»

## 8-се клас

**1-се бүлек. Мәктәп — белем шишмәһе!**

Белемгә юл. С. Әлибаев «Мәктәп юлы!». Н. Мусин. «Һабаҡ».

**2-се бүлек. Көҙ - эш һәммуллыҡ миҙгеле.**

Икмәк — илдең байлығыР. Ханнанов «Икмәк ҡәҙере».

Р. Өмөтбаев «Әмир баҫыуы»».
*Әҙәбиәт* . Композицияға төшөнсә

**3-сөбүлек. Уҡытыусы — ниндәй гүзәл исем!**

Мәңгелек һөнәр. Р. Ғарипов. Уҡытыусыма. Р. Шаммас. «Күперһеҙ йылғалар».
**4-себүлек. Салауат батыр ир ине**

Салауат Юлаев халыҡхәтерендә. Ф. Рәхимғолова «Салауат». Т. Дәүләтбирҙина «Салауат рухы». Кузбеков Ф. «Яу оранымбит һин, Салауат!». Я. Хамматов. (биографикбелешмә) «Салауат».
**5-себүлек. Ҡыш**

Ҡышҡы пейзаж. Ш. Бабич (биографик мәғлүмәт). «Ҡышҡы юлда».
Б. Рафиҡов. (биографик белешмә) «Бүреләр».
И. Теләүмбәтов «Моралым таңы». О. Перовская «Мишка».
**6-сыбүлек. Данлы йылдар, шанлы йылдар**

Еңеүгә юл. М. Кәрим. «Үлмәҫбай».
Н. Ғәлимов. «Яуҙан ҡайтҡан ҡурай».
Р. Өмөтбаев «Башҡорттар китте һуғышҡа».
*Әҙәбиәт теорияһы:* Лирик-эпик поэмаларҙың үҙенсәлектәре

Психологизм күренешеВ. Шукшин. «Ҡайғы». Х. Назар. «Өс һүҙ».

М. Ямалетдинов «Иман». З. Ғәлимов«Ялан сәскәләре»

**7-се бүлек. Шаулап-гөрләп яҙ килә!**

Әсәйем –күңел ҡояшым.Ш. Бикҡолов (биографик мәғлүмәт). «Әсәйемдең кәңәштәре».Т. Ғиниәтуллин «Әсә һәм бала»

. Яҙғы хикәйәләр. Р. Ғарипов «Яҙғы йыр». З. Ураҡсин «Алмағас». Р. Сафин «Тол ҡатындар һәм аяҡһыҙҙар бейеүе»

**8-себүлек. Тыуған ерем - Уралым**

Тыуған ер байлығы. К. Аралбай «Ете һүҙ ер тураһында». Б Бикбай. «Ер». Ж. Кейекбаев. «Урал тураһында ҡобайыр». Н. Мусин. «Һуңғы алыш». М. Уразаев «Еҙ ҡурай ». А. Йәғәфәрова «Кескәй шишмә». Ф. Рәхимғолова Ф. «Бал корто һәмкүбәләк». Ш. Янбаев. «Дегәнәк». Р. Солтанғәрәев «Һуңғы һунар». Ә.Хәметдинова «Йәшел дарыухана».

## 9- сы класс

**1-се бүлек. Тере шишмәләр**

Туған телем. Р. Ғарипов «Тел». Б. Бикбай. «Тере шишмәләр». Р. Мифтахов «Мираҫ». Т. Ҡарамышева «Һүҙ». И. Хәлимов «Төнгө моң».

**2-себүлек. Кендегемде киҫкән ер**

Р. Мифтахов «Күрҙем һине». К. Шафиҡова «Тыуған яҡ». И. Абдуллин. "Үҙ яғыма ҡайтһам". Х. Туфан. «Ҡыр ҡаҙҙары».

З. Вәлиди Туған «Тыуған төйәгемдә» ("Хәтирәләр" китабынан)

Нәзәкәтле тәбиғәт. М. Әбсәләмов «Йомагужа тирәктәре». Ф. Аҡбулатова «Тәбиғәт беҙҙең ярҙамда мохтаж» (мәғлүмәт).

А. Ғарифуллина «Гөрләүек». З. Алтынбаева «Балан». Башҡорт әҙәбиәтендә экологик проблемалар. Д. Шәрәфитдинов. «Йылғабағыры»

Ф. Ғазин «Ҡыраутейһен әйҙә..». М. Кәрим. «Айыу мажаралары».

В.  Ғүмәров«Башҡорт халыҡ медицинаһында дарыу үҫемлектәре».

Р. Каһир. «Алтын тамыр». К. Аралбай. «Янғантау».

*Әҙәбиәт теорияһы:*Әҙәби   төрҙәртураһында төшөнсә (эпос, лирика, драма).

**3-сөбүлек. Данлы тарих**

Үткән быуын кәңәштәре

БейешӘ.  «Башҡорт халҡының азатлыҡ өсөн тарихы».

Ш. Бабич. (биографик белешмә) «Халҡым өсөн».

Б. Рафиҡов. «Һөйәнтүҙфажиғәhе».

Г. Хисамов (биографикбелешмә) «Алдар менән Тәфтиләү».

*Әҙәбиәт  теориһыя:* Роман жанры тураһында төшөнсә

Тарихи-әҙәби ҡомартҡылар  булараҡ  башҡортшәжәрәләре. Юрматыырыуы шәжәрәhе.

«Байыҡ сәсәндең  Салауат батырға  әйткәне». Ш. Юлаев. «Яу».

М. Аҡмулла. «Инсафлыҡ»

**4-себүлек. Батыр hәм тоғро ат**

С. Ярмуллин «Башҡорт аты». Т. Ғиниәтуллин «Буян».

Р.  Өмөтбаев «Ғилмишәриф» («Атлы башҡорт» повесы буйынса).

Ғ. Вәлиуллин (биографик мәғлүмәт). «Ҡәлғә хужаһы hәм тотҡон».

*Әҙәбиәт теорияһы: Повестьтураһында төшөнсә*

Күңелле уйындар hәм ярыштар.Байрамдарыбыҙ тарихынан.

З. Әминев «Башҡорт һабантуйы». Д. Мәһәҙиев«Науруз байрамы».

Ҡурай моңомилләт тарихындаМ. Ямалетдинов Мираҫ Ш. Бабич. «Ҡурайҡайға». Ҡ. Аралбай. «Мәшһүрҡурайсы».

Р. Солтангәрәев (биографик мәғлүмәт). «Ишмулла ҡурайсы».

А. Айтҡолов (биографик мәғлүмәт)

*Әҙәбиәт теорияһы:Әҙәбиәт ғилеме тураһында төшөнсә*

.Ватанды һаҡлау.Мифтахов Р. «Ҡалҡан». Назаров Р. «Һалдат». Р. Хисаметдинова «Малайҙар армияға китә». М. Ямалетдинов «Һалдат итектәре». И. Кинйәбулатов Бородино. Ә Үтәбаев. «Һаҡмар аға бит».

Н. Асанбаев (биографикбелешмә) «Ҡыҙылпаша»

**5-се бүлек. Еңеү көнө**

Ә. Моратов. «Тере хәтер». Р. Мифтахов «Боҙлоҡуҙ». Н. Нәжми (биографик белешмә). " Ҡайтманығыҙтыуған ерегеҙгә".

Йәлил М. "Ышанма". А. Мәһәҙиев. «Еңеү менән ҡайтҡан»

Й. Кейекбаев. «Зөбәй Үтәғолов».М. Кәрим. «Малайҙар».Ш. Янбаев. «Йәнекәйҡарт».

*Әҙәбиәт теорияһы:Әҙәби процесс тураһындатөшөнсә.*

## «ТУҒАН (БАШҠОРТ) ӘҘӘБИӘТЕ» БЕЛЕМ БИРЕҮ ПРЕДМЕТЫН ТӨП ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ КИМӘЛЕНДӘ ҮҘЛӘШТЕРЕҮҘЕҢ КӨТӨЛГӘН ҺӨҘӨМТӘЛӘР

«Туған (башҡорт) әҙәбиәте» академик предметын төп мәктәптә өйрәнеү уҡыусыларҙың шәхси, мета-предметлы һәм предметлы һөҙөмтәләренә өлгәшеүгә йүнәлтелгән.

### Шәхси һөҙөмтәләре

«Тыуған (башҡорт) әҙәбиәте» белем биреү предметын төп дөйөм белем биреү кимәлендә үҙләштереүҙең шәхси һөҙөмтәләре традицион рус социаль-мәҙәни һәм рухи-әхлаҡи ҡиммәттәренә, йәмғиәттә ҡабул ителгән тәртип ҡағиҙәләренә һәм нормаларына ярашлы белем биреү һәм тәрбиә эшмәкәрлеге берҙәмлегендә өлгәшелә, үҙ-үҙеңде белеү, үҙ-үҙеңде тәрбиәләү һәм үҙ-үҙеңде үҫтереү, шәхестең эске йөкмәткеһен формалаштырыу процестарына булышлыҡ итә.

Программаны үҙләштереүҙең шәхси һөҙөмтәләре уҡыусыларҙың ыңғай ҡиммәткә ынтылыш йүнәлеш алырға әҙерлеген һәм электрон нигеҙҙә үҙенең тәжрибәһен киңәйтеүҙе, белем алыу эшмәкәрлегенең төп йүнәлештәрен тормошҡа ашырыу процесын сағылдырырға тейеш.

***Гражданлыҡ белеме:***

– гражданлыҡ бурыстарын үтәргә әҙер булыу һәм үҙ хоҡуҡтарын тормошҡа ашырыу, башҡа кешеләрҙең хоҡуҡтарын, иректәрен һәм законлы мәнфәғәттәрен хөрмәт итеү;

– ғаилә, мәғариф ойошмалары, урындағы йәмәғәтселек тормошонда әүҙем ҡатнашыу, тыуған төйәктәге, илдәге хәлдәрҙән хәбәрҙар булыу һәм уларҙы башҡорт телендә яҙылған әҙәби әҫәрҙәрҙә сағылдырылған ситуациялар менән сағыштырып анализлай һәм баһалай белеү;

– экстремизм, дискриминация кеүек күренештәрҙе кире ҡағыу;

– төрлө социаль институттарҙың кеше тормошонда ролен аңлау; күп мәҙәниәтле һәм күп конфессиялы йәмғиәттә граждандарҙың төп хоҡуҡтары, иректәрен һәм бурыстарынтәьминитеүсе социаль нормаларҙың һәм шәхес-ара мөнәсәбәттәр ҡағиҙәләренең идеяһы, башҡорт әҙәбиәте әҫәрҙәрендә ләсалышынкүреү;

гуманитар эшмәкәрлектә ҡатнашырға әҙер булыу (мохтаж кешеләргә ярҙам; ирекмәнлек);

***Патриотик тәрбиә:***

– күп мәҙәниәтле һәм күп конфессиялы йәмғиәттә кешеләрҙең граждандлыҡ үҙаңын берҙәмлеген таныу, илдә йәшәгән башҡа халыҡтарҙың араһында башҡорт теленең ролен аңлау;

– «Туған (башҡорт) әҙәбиәт» темаһы контексында башҡорт телен белеүгә, Рәсәй Федерацияһының тарихына һәм мәҙәниәтенә, башҡорт халҡының тарихына, мәҙәниәтенә ҡыҙыҡһыныу уятыу;

– башҡорт теленә, Тыуған ил — Рәсәй ҡаҙаныштарына, фәнгә, сәнғәткә, халыҡтың хәрби батырлығына һәм хеҙмәт ҡаҙаныштарына, ихтирамлы мөнәсәбәт тәрбиәләү;

– Рәсәй символдарын хөрмәт итеү, дәүләт байрамдары, тарихи мираҫҡа, тәюиәғәт ҡомартҡыларына, тыуған илендә йәшәгән төрлө халыҡтарҙың традицияларына һаҡсыллыҡ һәм ихтирам тәрбәиәләү;

***рухи-әхлаҡи тәрбиә:***

– төрлө ситуацияларҙа әхлаҡи ҡиммәттәргә һәм нормаларға өҫтөнлөк биреү;

– тәртибеңде, һөйләгән һүҙҙәреңде, ҡылған ҡылыҡтарыңды шулай уҡ башҡа кешеләрҙең ҡылыҡтарын әхлаҡи-хоҡуҡи нормалар күҙлегенән баһаларға әҙер булыу;

***Эстетик тәрбиә биреү:***

– сәнғәттең төрлө төрҙәрен, традицияларҙы, үҙ халҡыңдын һәм башҡа халыҡтарҙың ижадын тәрән аңлау һәләтен үҫтереү;

– аралашыу сараһы булараҡ башҡорт теленең әһәмиәтен аңлау;

– ватан һәм донъя сәнғәтенең әһәмиәтен, этник мәҙәни традицияларҙың һәм халыҡ ижадының ролен аңлау;

– сәнғәттең төрлө төрҙәрендә үҙ-үҙеңде танытыуға ынтылыш тәрбиәләү;

***физик тәрбиә, сәләмәтлек һәм эмоциональ именлек мәҙәниәтен формалаштырыу:***

– уҡыу процесында тупланған тәжрибәһенә нигеҙләнгән тормоштоң ҡәҙерен аңлау;

– үҙ сәләмәтлегенә яуаплы ҡараш, сәләмәт йәшәү рәүешенә өҫтөнлөк биреү (сәләмәт туҡланыу, гигиена ҡағиҙәләрен үтәү, дәрестәрҙең һәм ялдарҙың тигеҙ режимы, даими физик әүҙемлек);

– насар ғәҙәттәрҙең (алкоголь, наркотиктар ҡулланыу, тәмәке тартыу) һәм физик һәм психик сәләмәтлеккә зыян килтереүҙең башҡа төрҙәре) эҙемтәләрен аңлау;

– хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәү, шул иҫәптән интернет мөхитендә белем алыу процесында хәүефһеҙ тәртип булдырыу;

– үҙенде, башҡаларҙы нисек бар шулай ҡабул итә алыу һәләте;

– үҙеңдең дә башҡаларҙың да эмоциональ торошон аңлап килептыуған хәлдән сығыу өсөн тейешле тел сараларын ҡулланыу, шул иҫәптән башҡорт телендә яҙылған әҙәби әҫәрҙәр миҫалдарына таяныу;

– уйланыу оҫталығын формалаштырыу, башҡаларҙың да хата яһауға хоҡуғын таныу;

***Хеҙмәт тәрбә:***

– технологик һәм социаль йүнәлешле практик проблемаларҙы (ғаилә, мәктәп, ҡала, өлкә эсендә) хәл итеүҙә әүҙем ҡатнашыу, бындай эшмәкәрлекте башлап ебәреү, планлаштырыу һәм үҙ аллы башҡарыу һәләте;

– төрлө һөнәрҙәрҙе һәм хеҙмәтте практик өйрәнеү, хеҙмәтте хөрмәт итеү һәм хеҙмәт эшмәкәрлеге һөҙөмтәләре менән ҡыҙыҡһыныу;

– киләсәккә пландарың тураһында һөйләү һәләте;

***Экологик тәрбиә:***

– тирә-яҡ мөхит өлкәһендәге проблемаларҙы хәл итеү, ғәмәлдәрҙе планлаштырыу һәм уларҙың тирә-яҡ мөхит өсөн мөмкин булған эҙемтәләрен баһалау өсөн социаль һәм тәбиғи фәндәр өлкәһенә ҡараған белемдәрен ҡулланыуға йүнәлеш биреү;

